БАШКОРТОСТАН ЯЗЫУСЫЛАРЫ • ПИСАТЕЛИ БАШКОРТОСТАНА

Рәми Ғарипов

Башҡортостан Республикаһының
Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге
Милли китапханаһы
Мәғлүмәт һәм белешмә-библиография бүлеге

Рәми Ғарипов

Биобиблиографик күрһәткес

Өфө – 2022

ББК 91.9:83
Ғ 21

Сығарыу өсөн яуаплы: М.М. Зөлкәрнәев
Төҙөүселәре: З.З. Абдуллина, З.Т. Әғзәмова,
Г.С. Әхмәҙиева, Г.Ә. Байматова, Ә.Й. Батыршина,
Г.М. Гатина
Мөхәррире: З.Т. Әғзәмова
Яуаплы мөхәррире: Ә.М. Фәтхетдинова
Техник мөхәррире
һәм баҫманы биттәргә урынлаштырыу: А.Р. Йосопов

Ғ 21 Рәми Ғарипов : биобиблиографик күрһәткес / төҙөүселәре : З. З. Абдуллина, Г. С. Әхмәҙиева, Г. Ә. Байматова һ. б. – Өфө : Башҡортостан Республикаһының Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханаһы, 2022. – 224 б.

ББК 91.9:83
© Башҡортостан Республикаһының
Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге
Милли китапханаһы, 2022

Национальная библиотека
имени Ахмет-Заки Валиди
Республики Башкортостан
Информационный и справочно-библиографический отдел

Рами Гарипов

Биобиблиографический указатель

Уфа – 2022

ББК 91.9:83
Г 20

Ответственный за выпуск: М.М. Зулькарнаев
Составители: З.З. Абдуллина, З.Т. Агзамова, Г.С. Ахмадиева, Г.А. Байматова, А.Ю. Батыршина, Г.М. Гатина
Редактор: З.Т. Агзамова
Ответственный редактор: А.М. Фатхутдинова
Технический редактор и верстка: А.Р. Юсупов

Г 20 Рами Гарипов : биобиблиографический указатель / составители : З. З. Абдуллина, Г. С. Ахмадиева, Г. А. Байматова и др. – Уфа : Национальная библиотека им. Ахмет-Заки Валиди Республики Башкортостан, 2022. – 224 с.

ББК 91.9:83.
© Национальная библиотека
им. Ахмет-Заки Валиди
Республики Башкортостан, 2022

Йөкмәткеһе – Содержание

Төҙөүселәрҙән 8

От составителей 9

Бикбаев Р. Шағир аманаты 10

Юлдашбаев А. И песня к людям
возвратится снова... 39

**I. Рәми Ғарипов әҫәрҙәре –
Произведения Рами Гарипова 55**

1. Китаптары – Книги 55

2. Йыйынтыҡтарҙа һәм ваҡытлы матбуғатта
баҫылған әҙәби әҫәрҙәре – Художественные
произведения, опубликованные в сборниках
и периодических изданиях 58

3. Р. Ғарипов һүҙҙәренә яҙылған йырҙар –
Песни, написанные на слова Р. Гарипова 98

4. Очерктар, мәҡәләләр, көндәлектәр, хаттар –
Очерки, статьи, дневники, письма 105

5. Тәржемәләр – Переводы 113

**II. Рәми Ғариповтың тормошо һәм ижады
тураһында әҙәбиәт – Литература о жизни
и творчестве Рами Гарипова 126**

1. Рәсми материалдар –
Официальные материалы 126

2. Дөйөм материалдар – Общие материалы 127

3. Рәми Ғарипов энциклопедияларҙа, белешмә китаптарында, библиографик күрһәткестәрҙә – Рами Гарипов в энциклопедиях, справочниках, библиографических указателях 183

4. Рәми Ғариповҡа арнауҙар – Посвящения Рами Гарипову 185

5. Рәми Ғарипов исемен мәңгеләштереү – Увековечение памяти Рами Гарипова 191

Исемдәр күрһәткесе – Именной указатель 195

Ҡушымталар – Приложения 210

1. Рәми Ғариповҡа арналған шиғырҙар – Стихи, посвященные Рами Гарипову 210

2. Фотоматериалдар – Фотоматериалы 220

Төҙөүселәрҙән

Ә. Вәлиди исемендәге Милли китапхана фонды һәм белешмә-библиографик аппараты нигеҙендә төҙөлгән был биобиблиографик күрһәткес Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Йәғәфәр улы Ғарипов әҫәрҙәрен, уның тормошо һәм ижады тураһындағы әҙәбиәтте яҡтыртыу, системалаштырыу маҡсатынан төҙөлдө. Ҡулланмаға башҡорт, рус, татар һәм башҡа телдәрҙә 1949–2021 йылдарҙа баҫылып сыҡҡан китаптар, йыйынтыҡтар, уларҙан һәм гәзит-журналдарҙан алынған мәҡәләләр индерелде. Башҡа телдәрҙәге әҙәбиәт тейешле бүлексәләрҙә рус телендә бирелде, мәҫәлән, «Ҡаҙаҡ телендә – На казахском языке».

Күрһәткес ике бүлектән тора: «Рәми Ғарипов әҫәрҙәре» һәм «Рәми Ғариповтың тормошо һәм ижады тураһындағы әҙәбиәт». Әҙәбиәт бөтә бүлектәрҙә лә хронологик тәртиптә, йыл эсендәге мәғлүмәттәр алфавит буйынса урынлаштырылды. Баҫма Р. Бикбаевтың «Шағир аманаты» һәм А. Юлдашбаевтың «И песня к людям возвратится снова...» исемле мәҡәләләре менән асыла.

Библиографик күрһәткес «Библиографик яҙма. Библиографик тасуирлама. Дөйөм талаптар һәм төҙөү ҡағиҙәләре» 7.0.100–2018 һәм «Библиографик яҙма. Рус телендәге һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе ҡыҫҡартыу. Дөйөм талаптар һәм ҡағиҙәләр» 7.0.12–2011 ГОСТ-арына ярашлы төҙөлдө.

Баҫманың ярҙамсы аппараты исемдәр күрһәткесенән тора.

Ҡушымталарҙа Рәми Ғариповҡа арналған шиғырҙар һәм фотоһүрәттәр урын алды.

Тәҡдим ителгән күрһәткес сығанаҡтарҙың бөтөн тулылығына дәғүә итмәй.

Күрһәткес әҙәбиәтселәргә, уҡытыусыларға, китапхана, нәшриәт, киң мәғлүмәт саралары һәм ғилми хеҙмәткәрҙәргә, студенттарға, уҡыусыларға һәм шулай уҡ шағирҙың тормошо һәм ижады менән ҡыҙыҡһыныусыларға тәҡдим ителә.

От составителей

Настоящий биобиблиографический указатель составлен с целью учета и систематизации произведений народного поэта Башкортостана Рами Ягафаровича Гарипова и литературы о его жизни и творчестве. Указатель подготовлен на основе фонда и справочно-библиографического аппарата Национальной библиотеки им. А.-З. Валиди. В пособие включены книги, сборники, статьи из сборников, журналов и газет на башкирском, русском, татарском и других языках, опубликованных в 1949–2021 годах. Литература на других языках описана на русском языке в соответствующих подразделах с указанием языка, например, «Ҡаҙаҡ телендә – На казахском языке».

Указатель состоит из двух разделов: «Произведения Рами Гарипова» и «Литература о жизни и творчестве Рами Гарипова». Внутри разделов материал расположен в хронологической последовательности с учетом языка публикации. Указатель предворяют статьи Р. Бикбаева «Шағир аманаты» и А. Юлдашбаева «И песня к людям возвратится снова...».

Все материалы описаны в соответствии с ГОСТами 7.0.100–2018 «Библиографическая запись. Библиографическое описание. Общие требования и правила составления» и 7.0.12–2011 «Библиографическая запись. Сокращения слов и словосочетаний на русском языке. Общие требования и правила».

Издание снабжено вспомогательным именным указателем. В приложении даны стихи, посвященые Рами Гарипову и фотоматериалы.

Указатель не претендует на исчерпывающую полноту отражения источников.

Указатель адресован деятелям науки, преподавателям, литературоведам, и средств массовой информации, библиотечным и издательским работникам, студентам и учащимся, а также всем, кто интересуется жизнью и творчеством поэта.

Шағир аманаты

Кистәрен офоҡтар тағы ла зәңгәрләнеп, яҙҙың тәүге һулышы күңелдәрҙе елкендергән миҙгелдә, ярмаланған ҡарҙарҙы аҡтарып, ул сәскәләр эҙләргә ярата торғайны. Кескәй генә аҡһыл сәскәләрҙе ҡулында тотоп, шағир хазина тапҡандай ҡыуанып ине. Ғүмере буйы Рәми Ғарипов шулай килер яҙҙарына ашҡынды, ҡарҙарҙы ҡулы менән аҡтарып, кешеләргә тиҙерәк сәскә бүләк итергә ашыҡты, кешеләрҙең күңелендә сәскәләр әҙләне. Бәлки, уның иң ҙур хазинаһы ла ҡарҙы тишеп сыҡҡан сәскә менән кешеләр күңеленән бөркөлгән яҡтылыҡ булғандыр.

Шағир Рәми Ғарипов менән аралашҡан кешеләр уның эш бүлмәһендә эленеп торған Башҡортостан картаһын хәтерләйҙәрҙер. Республикала Рәми Ғарипов булған урындар унда шағирҙың үҙ ҡулы менән билдәләнгән. Был картала күпме ауылдан, күпме райондан Өфөгә килеп тоташҡан һыҙыҡтарға ҡарап, илгиҙәр шағирҙың ни тиклем тынғыһыҙ юламан булыуына һоҡланмау мөмкин түгел.

Рәми Ғарипов юл йөрөргә ярата торғайны. Мәскәүҙә Әҙәбиәт институтында укыған йылдарҙа йәйге каникул ваҡытында ул йәйәүләп Башҡортостандың байтаҡ райондарын йөрөп сыға, сәсән олатайҙар, инәйҙәр менән осрашып, халыҡ ижад иткән һүҙ ынйыларын яҙып ала. Артабан журналист юлдары уны тағы ла бик күп кешеләр менән осраштыра. Алтмышынсы-етмешенсе йылдарҙа Рәми Ғарипов ар- хеологтар менән дә сәфәрҙәрҙә булып ҡайтты. Археолог дуҫы Нияз Мәжитовҡа арналған шиғырында уның ошондай һүҙҙәре бар: «Ҡатын-ҡыҙҙың ынйыларын эҙләп, эҙләйҙер ул Тыуған илкәйҙе». Ер ҡатламдарын ғына

түгел, тарих ҡатламдарын аҡтарып, Тыуған илеңде, туған халҡыңды мөмкин тиклем тулыраҡ аңларға ынтылыу – Рәми Ғариповты һәр саҡ юлға йөрәкһетеп торған сәбәптәрҙең береһе, бәлки, шундалыр.

Әлбиттә, кеше ғаләмдәрҙе яулаған бөгөнгө ғәләмәт тиҙлектәр заманында республика буйлап бындай сәйәхәттәр ғәҙәти хәл булып күренергә лә мөмкин. Ләкин Рәми Ғарипов өсөн тыуған ер буйлап үткән ҡыҫҡа ғына юлда оло вакиға, тәрән мәғәнәле ижад эше ине. Ул һәр бер күргәне хаҡында туктауһыҙ уйланыр, барыһын да йөрәге аша үткәрер, юлдан йә ҡыуанып, йә борсолоп ҡайтыр ине. Шағирҙың ғәжәп бай архивында төрлө йылдарҙағы сәфәрҙәрҙең иҫтәлеге булған тиҫтәләгән блокнот һаҡланып ҡалған. Уларҙа күпме тәьҫораттар, атҡарылған һәм атҡарылмай ҡалған уй-хыялдар...

Рәми Ғарипов тураһында уйлағанда, уның менән бергә үткән юлдар үҙҙәренең онотолмаҫ иҫтәлектәре, бөгөнгөләй йәнле төҫ-ауаздары менән күҙ алдына баҫа.

1968 йылдың балҡып торған сыуаҡ көҙө. Бер икһеҙ-сикһеҙ Ырымбур далалары буйлап Туҡ-Соран яҡтарына китеп барабыҙ. Бараһы еребеҙгә төн уртаһында ғына килеп еттек. Рәми Ғариповты бында иң ныҡ һоҡландырғаны баҙрап торған дала йондоҙҙары булды. Был йондоҙҙар шундай эре, шундай яҡын ине – үрелеп кенә алырлыҡ кеүек. Рәми Ғарипов менән ун көн эсендә беҙ утыҙҙан артыҡ ауылда булдыҡ, Дауыт Юлтый, Мөхәмәтша Буранғолов, Сәғит Агиш, Ғабдулла Амантай һ.б. эҙҙәрен һаҡлаған юлдар буйлап үттек, күктәге йондоҙҙарға ғына түгел, кешеләрҙең күңелендәге матурлыҡҡа һоҡландыҡ. Үҙемдең тыуған яҡтарымды Рәми Ғарипов менән мин яңынан астым,

яҡынданыраҡ аңланым. Ысынлап та, уның менән күп нәмәләр яңыса күренә, кешеләр ҙә, ер-һыуҙар ҙа башҡасараҡ, тулыраҡ асыла ине. Белорет – Шишмә тимер юлы яңы төҙөлә башлаған ваҡытта Урал тауҙарына шағир менән бергә артылғанда ла, Федоровка, Илеш, Ишембай яҡтарында бергә йөрөгәндә лә мин быға күп тапҡырҙар шаһит булдым.

Был донъяның иркә улы булып,
Йәшәүҙәр юҡ беҙгә кинәнеп.
Һиндә – Салауаттың яралары.
Миндә – һыҙланыуы Кинйәнең.

Ҡайҙа барһам, әсе моңдай сыңлап,
Йөрәгемдә бергә килерҙәр
Шәһиттәрҙең ҡаны аҡҡан боҙҙар,
Зөбәйҙәрҙән ҡалған күмерҙәр.

Көнөн-төнөн көйрәп, күңелдәрҙә
Атайҙарҙан ҡалған уй ята.
Донда ҡорбан булған Дим улдары
Ыңғырашып таңда уята.
Ете ятҡа төшкән йот-ҡайғыға
Күҙебеҙҙән сыға йәш бәреп.
Ҡатын ҡосағында йәшәмәнек,
Халыҡ ҡосағында йәшәнек.

Һалайыҡсы иңгә донъя йөгөн,
Көтмәйенсә көсләп еккәнде.
Бәхет беҙҙең менән, халыҡ тыны
Ҡағып торһа ғына елкәнде.

Бергә йәшәгән, бергә ижад иткән йылдарҙы һағынып иҫкә алғанда, Рәми Ғариповтың кешелек һәм шағирлыҡ тәбиғәтен иң тулы асыусы матур сифаттарҙың береһе хаҡында айырым әйтке килә. Рәми Ғарипов кешене тыңлап туймаҫ кеше ине. Ваҡыты юҡ саҡта *ла ул* башҡа кеше өсөн ваҡыт таба алды, һәр саҡ иғтибарлы, хәстәрлекле булды. Шағир ғүмере буйы фекер уртаҡлашыуға, рухи аралашыуға сарсап йәшәне. Уның гел генә юлға ашҡыныуы *ла* кешеләргә ашҡыныуынан, халыҡ күңелен тулыраҡ күргә ынтылыуынан килә ине.

Рәми Ғариповты күреп-белгәндәрҙең күбеһендә, бөтәһенән элек, шағирҙың сабыр йылмайыуы хәтерҙә ҡалған: кешегә бөтә күңеле менән, эске нур менән йылмайып *кул* һуҙыр ине *ул*.

Әлбиттә, шағир һәр сак йылмайып ҡына йәшәй алмай. Рәми Ғарипов донъяға һоҡланып ҡына ҡалманы, уны һаҡлау өсөн кешеләрҙе уяулыҡҡа саҡырып оран һалды, шиғырҙарында тынғыһыҙ заман тураһында борсолоп, һыҙланып уйланды. Уға бәләкәстән үк замандың байтаҡ һынауҙарын үтергә, ауырлыҡтарын үҙ иңендә күтәрергә тура килде.

1932 йылдың 12 февралендә Салауат районындағы Арҡауылда тыуған Рәми Ғарипов тиҫтерҙәре күргән шатлыҡ-ҡайғыларҙы бергә күреп, улар менән бергә сынығып үҫте. Уның тормошҡа ҡарашы, кешеләргә мөнәсәбәте, ғөмүмән, йәшәү принциптары дәһшәтле һуғыш йылдарында һәм һуғыштан һуңғы ауыр дәүерҙәрҙә нығынды. Уның тормош юлын байҡағанда иң ныҡ хәтергә ҡалған сифаттарҙың береһе – маҡсатҡа тоғролоғо, туктауһыҙ алға ынтылыуы, оло хыялдар, юғары идеалдар менән илһамланып йәшәүе.

Шағирҙың тәүге китабына ингән «Әсәм ҡулдары» исемле шиғырҙы һоҡланмай хәтерләү мөмкин түгелдер. «Ҡәләмдәш иптәштәргә хаттар»ында (1956–1957) был шиғыр хаҡында Мостай Кәрим ошолай тигәйне: «Был әҫәр мине тулҡынландырҙы тип кенә әйтһәм, аҙ булыр, ул минең йөрәгемде көйҙөрөп алды. Ябай ғына хикәйә-хәтерләү. Һуғыш ваҡытында тол әсә менән етем ҡалған бала бесән сабырға килә. Әсә улының салғыһын янып бирә, нисек сабырға өйрәтә (әсә!). Бала саба башлай.

Атайың да шулай саба ине –
Был тиклем дә оҡшар икәнһең... –

ти әсә. Ябай ғына яҙылған был шиғырҙы мин беҙҙең башҡорт поэзияһында әсә хаҡында иң яҡшы әҫәрҙәр рәтенә индерер инем».

1977 йылдың йәйендә миңә бер төркөм башҡорт шағирҙары менән бергә Йүрүзән буйҙарында Салауат көндәренә арналған әҙәби осрашыуҙарҙа ҡатнашырға тура килгәйне. Малаяҙҙағы мәктәптә тыуған яҡты өйрәнеү музейы менән танышып йөрөгәндә күргән бер документ әле лә иҫтән сыҡмай. Рәми ағайҙың әсәһе Гөлмәрйәм апайҙың һуғыш йылдарындағы ҡаһарманлығы – районда иң уңған ураҡсы булыуы хаҡында һөйләй ине ул. Шул ваҡыт тағы ла «Әсәм ҡулдары» исемле шиғырҙан «Ул саҡ, әсәй, белмәй инем әле алтын икәнлеген ҡулдарың!» тигән һүҙҙәр хәтергә килде. Буласаҡ шағир сабый саҡтарында әсә ҡулдарының алтын икәнлеген тулыһынса, бәлки, аңлап та бөтмәгәндер. Ләкин ошондай алтын ҡуллы әсәнең хеҙмәткә булған мәхәббәте улына ла күсә, тотонған эшен мөкиббән китеп башҡарыу, тынғы белмәй йәшәү уның ғүмерлек сифатына әйләнә.

Йәғәфәр ағай яу ҡырында башын һалғас, Гөлмәрйәм апай бер үҙе дүрт баланы тәрбиәләп үҫтерә. Егәрле ҡатын Салауат районында иң шәп көлтә бәйләүсе булып таныла, был эштә уға берәү ҙә тиңләшә алмай. Шағирҙың автобиографияһынан: «Һуғыш ваҡытында әсәйемде Салауат районының комбайны тип йөрөттөләр. 1942 йылдағы ураҡ ваҡытында ул бер үҙе ҡул менән 18 гектар игенде урҙы һәм беҙҙең район ҡатындарынан беренсе булып дәүләт наградаһы менән бүләкләнде». Был ауыр йылдарҙа Рәми әсәһенең уң ҡулына әйләнә. Туғандарын ҡарай, колхозға ярҙамлаша, ат көтә, үҫмер генә көйө ярһыу Йүрүҙәндә һалдар ағыҙа. Яҙмыш уны бәләкәстән үк сыныҡтыра, быуынын хеҙмәттә нығыта, ҡыйынлыҡтар менән көрәшеп йәшәргә өйрәтә. Ауырлыҡтарҙан янтаймаҫҡа, асы хәҡиҡәттең күҙенә тура ҡарарға өйрәтә. Рәми Ғарипов шиғырҙарының тормошсанлығы, шағирҙың тура һүҙе бына ҡайҙарҙан килә.

Шағир тәүге шиғырҙарынан уҡ етди булды, тормоштағы иң мөһим хәлдәр тураһында төплө һүҙ әйтергә тырышты. Етдилеге өсөн уны мәктәп йылдарында уҡ «бабай» тип йөрөттөләр. Башҡортостан тарихын, халыҡ яҙмышын тәрәндәнерәк аңларға тырышып, ул каникул ваҡыттарында йәйәүләп райондар буйлап йөрөнө, ил сәсәндәренән ҡиммәтле ҡомартҡылар яҙып алды. Илленсе йылдар башында уҡ ул «Әсәм ҡулдары», «Саған», «Тәүге һөйөү» һымаҡ тос шиғырҙарын яҙҙы, йылдарға йылдар үрелгән кеүек, уларға «Таш сәскә», «Туған тел», «Урал йөрәге», «Тимер юл» һымаҡ хәҙер бик күптәргә яҡшы таныш әҫәрҙәр өҫтәлә барҙы.

Өфөлә интернат-мәктәптә укыған йылдарында Рәми Ғарипов ижад донъяһына тәүге аҙым яһаһа, илленсе йылдар башында Мәскәүҙәге атаҡлы һәм донъялағы берҙән-бер махсус әҙәби уҡыу йортонда – Максим Горький исемендәге Әҙәбиәт институтында – белем алыу, Маршак, Паустовский, Сельвинский кеүек һүҙ оҫталарының дәрестәрен тыңлау йәш шағир алдында тағы ла киңерәк офоҡтар аса, шиғри һүҙгә талапсаныраҡ ҡарарға, яуаплыраҡ булырға өйрәтә. Институтты тамамлағанда «Йүрүҙән» исемле тәүге китабы донъя күрә, 1958 йылда «Таш сәскә» тигән икенсе китабы баҫылып сыға.

Илленсе йылдарҙа әҙәбиәткә килгән үҙ быуыны араһында Рәми Ғарипов бик иртә асылды, үҙ тауышын тиҙ тапты, йәшләй генә ижади өлгөрҙө. Шағирҙың тәүге йыйынтыҡтары матбуғатта ла, уҡыусылар араһында ла һәйбәт баһа алды. Был осорҙа шағир үҙенсәлекле үҫеш юлы үтте. Тәүге китабында әле өйрәнсек шиғырҙар ҙа күренеп ҡалһа, «Таш сәскә» шул осорҙағы башҡорт шиғриәтендә мөһим ваҡиғаға әйләнде. Йәш шағирҙың ижад йөҙө һаман асыҡлана, тауышы нығына, шиғриәттә абруйы күтәрелә бара ине.

Ләкин үҙ-үҙенә һәр ваҡыт талапсан автор был уңыштар менән генә тынысланып йәшәй алманы. Тәүге китаптарҙағы әҫәрҙәр бала саҡ һәм үҫмер ваҡыттарҙағы тәьҫораттарҙан, студент йылдарындағы тормош тәжрибәһенән тыуғайны. Ижад иһә яңыраҡ кисерештәр, тормош менән нығыраҡ аралашып йәшәүҙе талап итте. Шағир яҙмышында эскерһеҙ йәшлек миҙгеленән ысын өлгөрөү дәүеренә күсер саҡ еткәйне. Егет ярһыуҙары ир хәстәре менән алмашынды. Тап ошо ваҡытта ул һөйөклө Өфөһөн, күңеленә яҡын матбуғат эшен ҡалдырып, тыуған яҡтарына ҡайтты:

Ҡайтам! Ҡайтам!
Йырҙарыма ҡайтам!
Ҡалып тор һиң, гүзәл башҡалам.
Минһеҙ ҙә бит бер ни булмаҫ һиңә,
Һин шауларһың минән башҡа ла!

Күңеле уның ошондай ярһыу менән
тулғайны:

Бына был тышаулы аттың
Һалдырып та алып тышауын,
Һыбай ярып үткем килә
Ҡайындарҙың йәшел ҡоршауын.
Ҡайтмай озаҡ йөрөгәнгә
Ботаҡтары биткә һыҙырһын.
Һыҙырһын да, йәш япраҡтай,
Был донъяға яңынан тыуҙырһын!..

50-се йылдар аҙағында Салауат районына ҡайтып, 1962 йылға тиклем «Йүрүҙән» колхозында, «Һарғамыш» совхозында комсомол секретары, район гәзитендә бүлек мөдире булып эшләү Рәми Ғариповтың ижад биографияһында иң әһәмиәтле ваҡиғаларҙан һаналырға хаҡлы. Был йылдарҙа уның ижады өр-яңы поэтик юғарылыҡҡа күтәрелде. Өфөгә шағир «Һабантурғай йырҙары», «Осоу» исемле китаптар менән ҡайтты. Дөрөҫөрәге, был ике йыйынтыҡ бер тынала, бер рухта яҙылған бер китап ине, уларҙың икегә бүленеп сығыуы – башҡа мәсьәлә.

«Һабантурғай йырҙары», «Осоу» исемле китаптарҙа тупланған шиғырҙарҙағы иң төп ҡаҙаныш – ижадтың тормошсан нигеҙе нығыу, уларҙа кеше яҙмышының үҙәктә тороуы. Шағир яҡташтары

менән бергә сәсеүҙә йоҡоһоҙ төндәр үткәрҙе, тирләп-бешеп кәбән ҡойҙо, баҫыуҙарҙан баҫыуҙарға сапты, етешһеҙлектәрҙе тәнҡитләп, «Молния»лар сығарҙы – ҡыҫҡаһы, игенсенең һөйөнөстәре һәм көйөнөстәре менән йәшәне, шулар менән илһамланып шиғырҙар яҙҙы. Был осорҙа ижад ителгән әҫәрҙәренең тематикаһы ниндәй киң, уй-тойғолар йәйғор кеүек күп төрлө һәм сағыу! Уларҙа хеҙмәт яршыуы ла, тыуған ерҙең матурлығы ла, халыҡтың уҙғаны һәм бөгөнгө яҙмышы менән ғорурланыу ҙа, ҡайнар мөхәббәт кисерештәре лә шиғри һәм тәбиғи әйтеп бирелгән.

Алтмышынсы йылдар башында Рәми Ғарипов шиғриәтенең иң аҫыл биттәре асылды. Был осорҙа ул айырыуса илһамланып эшләне. Шағирзың «Умырзая йыры» исемле китабында яҙылыу ваҡыты буйынса урынлаштырылған шиғырҙарҙы тағы ла бер ҡат күҙҙән үткәрегеҙ. Алтмыш икенсе йылда ғына ла, мәҫәлән, йөҙләгән шиғыр яҙылған! Уларҙың һанынан бигерәк сифаты, поэтик һүҙҙең һаман үткерләнә барыуы ҡыуандыра. «Һабантурғай йырҙары», «Осоу» исемле йыйынтыҡтарҙағы һәйбәт һыҙаттар артабан «Аманат», «Миләш-кәләш» исемле китаптарҙа үҫтерелде. Был әҫәрҙәр барыһы ла алтмышынсы-етмешенсе йылдарҙағы башҡорт шиғриәтенең үҫеш юлында Рәми Ғариповты иң үҙәк фигураларҙың береһе дәрәжәһенә күтәрҙе.

Ысын шағир хаҡында һүҙ барғанда, уның шиғриәткә алып килгән яңылығы, новаторлыҡ сифаттары тураһында ла уйланмау мөмкин түгел. Рәми Ғарипов ҡабатланмаҫ шағир, үҙенсәлекле талант ине. Хеҙмәт кешеһенә иғтибар, халыҡ яҙмышы тураһында уйланыуҙар, ил-тел хаҡында хәстәрлек, шиғри һүҙгә юғары талап, образлылыҡтың артабан

үçеше, шиғырҙарҙағы ябайлыҡ һәм күңелдәрҙе арбай торған лирик моң, уй-кисерештәр балҡышы һәм тормоштоң үҙе кеүек тәбиғилек – Рәми Ғарипов яулаған ижади бейеклектәр хаҡында бына ошолай төрлө яҡлап фекер йөрөтөп була. Уларҙың һәр береһе махсус тикшеренеүгә лайыҡ. Мәҫәлән, лирикаһында кеше менән тәбиғәт араһындағы бәйләнеш ни тиклем тулы сағыла, ниндәй көслө шиғри юлдарҙа асыла:

Мин ер инем, ергә баҫҡан саҡта,
Мин күк инем, күккә баҡҡанда,
Мин ут инем, дөрләп ут янғанда,
Мин һыу инем, йор һыу аҡҡанда...

Был һүҙҙәрҙе тәбиғәтте йәне-тәне менән һөйгән һәм аңлаған шағир ғына әйтә ала, һәм ошондай юлдарҙың тыуыуы шиғриәттең бәхетен, уның киләсәген билдәләй.

Рәми Ғарипов тал менән тал, кескәй ҡошсоҡ менән ҡошсоҡ булды, бәхетленең бәхетенән кинәнде, ҡайғылының ҡайғыһына көйөндө. Ул уҡыусыға үләндең, япраҡты шыптыр-шыптыр күтәреп, яктыға атылып сыҡҡанын ишеттерә белде. Донъялағы һәр ябай ғына әйберҙә лә кеше ғүмеренең асыллығын асыусы, тормоштоң бөйөклөгөн раҫлаусы тәрән мәғәнә күрҙе.

Ҡайҙа зәңгәр сәскә? Юҡ шул әле!..
Мә, алып тор һин тал бөрөһөн.
Тик бынан һуң тал да был донъяла
Зәңгәр сәскә булып йөрөһөн! –

Был юлдарҙа тыуған ерҙең һәм тормоштоң һәр күҙәнәгенә ҡарата ни тиклем хәстәрлекле мөнәсәбәт. Илаһи йәйге кистәрҙең береһендә «Ә мин һаман ултырырмын кеүек тартай моңонан да иҫереп» тигән шағир тормоштағы һәм тәбиғәттәге һәр хәрәкәттән, һәр биҙәктән үзенсә шулай йәм һәм мәғәнә таба белде, кеше күҙендәге һәм сәскә ҡарашындағы ихласлыҡҡа, матурлыҡҡа табынып йәшәне.

Шиғри тәбиғәтенең бар булмышы менән Рәми Ғарипов нескә тойғоло, фәлсәфәүи мәғәнәле лирик шағир. Уның әҫәрҙәре шиғри көндәлекте хәтерләтә. Ләкин был көндәлек үтә шәхси донъяның ығы-зығыһын һөйләүгә әйләнмәй. Лирикаһының иң үҙенсәлекле яғы – шиғырҙарының ябайлығында һәм шағирҙың донъялағы иң ябай нәмәләрҙең, иң ғәҙәти хәлдәрҙең дә матурлығын күрә, шиғрилеген таба белеүендә.

«Башҡорт шиғриәтенә Рәми Ғарипов нимә өҫтәне?» тигән һорауға, йыйып ҡына әйткәндә, Рәмиҙе өҫтәне, ҡабатланмаҫ поэтик шәхес, үҙе оло бер донъя булған Рәмиҙе өҫтәне, тип әйтке килә. Әҙәбиәткә ул үҙе булып килде, үҙен бирҙе, үҙен фиҙа итте. Фиҙаҡәрлек – уның холоҡ-ҡылығына иң ныҡ тура килгән һүҙҙәрҙең береһе. Рәми үҙенең поэтик донъяһына һәр саҡ тоғро булып ҡалды һәм уның аша тормоштоң матурлығын аса алды.

Рәми Ғарипов илдең уҙғанына һәр саҡ иғтибарлы булды, халҡыбыҙҙың бәхетле бөгөнгөһөн ҡәҙерләргә өйрәтте һәм яҡты киләсәккә саҡырҙы. Халыҡтың мәңгелек ижад дәртендә ул уҙғанды, бөгөнгөнө һәм киләсәкте бәйләүсе бөйөк көстө күрҙе.

Рәми Ғарипов бөгөнгө көн менән генә йәшәмәне, уҙғандарҙың тәжрибәһе аша киләсәкте күрергә ынтылды. «Әллә ниндәй таш быуатҡа китеп, ваҡыт

әрәм итеп ҡайтаһың» тигән нигеҙһеҙ ғәйепләүҙәргә ҡаршы ул: «Мин, үткәндәр менән байығып, киләсәккә ҡомһоҙ ҡарайым», – тип яуап бирҙе.

Шағир әҫәрҙәрҙә төрлө формаларҙы оҫта ҡулланды, лирик уйланыуҙар мәлендә ләә, диалогтарҙа ла, эс серҙәрен уртаҡлашып, башҡаларға өндәшкәндә ләә, донъя алдында бар һауап, гонаһтарын асып һалған саҡтағы намыҫ һүҙендә ләә, тәбиғәткә һоҡланғанда ла, замандың именлеген ҡурсалаусы гражданин һүҙен әйткәндә ләә үҙе булып ҡалды.

Дөрөҫлөктө яҡлау, матурлыҡты яратыу – был кисерештәр абстракт һүҙҙәр түгел, шағир яҙмышында улар конкрет тетрәүҙәр аша кәүҙәләнә. Рәми Ғарипов лирикаһының поэтик үҙенсәлектәрен тикшереү, һис шикһеҙ, кәрәкле һәм мауыктырғыс эш. Ләкин уның шиғриәтен һәм тормош юлын айырылғыһыҙ берлектә, шағирҙың фажиғәләре һәм байрамдары аша, принциптарының еңеүе, ҡараштарының үҫеүе, ҡыйралыштары һәм осоштары аша ғына аңларға кәрәк.

Рәми Ғарипов башҡорт һүҙ сәнғәтен энәһенән ебенә тиклем ентекле өйрәнгән, донъя әҙәбиәте менән яҡшы таныш булған, төплө әҙерлекле, киң ҡарашлы шағир ине. Башҡорт шиғриәтендәге, йырҙарҙағы, ҡобайырҙарҙағы бай традицияларҙы уңышлы дауам итеү менән бергә донъя лирикаһының һәм бөйөк рус шиғриәтенең аҫыл үрнәктәрен ентекле өйрәнеп ижадҡа килде. Рәми Ғарипов иң уҡымышлы тел оҫталарыбыҙҙың береһе ине. Ул ғүмере буйы яһалмалылыҡты, һуҡыр эйәреүҙе, күңелдән кисерелмәгән буш һүҙҙәр теҙмәһен күралманы. Шағирзың йәнле яҙмышына әйләнмәгән образдар хаҡында ул былай тип яҙҙы:

Яҙһағыҙ ҙа тәйән ат та ат тип,
Ҡайҙа һеҙҙең менгән атығыҙ?
Аттан бигерәк шығырығыҙ арыҡ,
Бөгөнгөгә, дуҫтар, ҡайтығыҙ.

Ат туғарып егә белмәҫ әҙәм
Ат хаҡында шығыр яҙғанда,
Мин нишләйем — тайҙар көтөүсеһе,
Аҡылымдан хатта яҙғандай.

Рәми Ғариповтың шиғри тәржемәләре уның ижадының интернациональ рухын тағы ла тулыраҡ асыусы ғәжәп бер күренеш ул. Башҡа халыҡтарҙың һүҙ хазинаһына Рәми һәр саҡ оло ихтирам менән ҡараны, үҙенең һоҡланыуын башҡалар менән бүлешергә теләп, ошо хазиналарҙы башҡортса яңғыратырға ашыҡты. Хәҙерге башҡорт поэзияһында ул иң күренекле тәржемәсе булып танылды. Рудаки, Ғүмәр Хәйәм, Байрон, Шиллер, Гейне, Пушкин, Лермонтов, Блок, Есенин, Твардовский, Рәсүл Ғамзатов, Дудин... Был шағирҙарҙың һүҙҙәрен башҡорт уҡыусыһына Рәми Ғарипов хуш еҫен, шиғри аһәңен юғалтмайынса еткерә алды. Уның тәржемәһендә Есениндың билдәле бер шығыры бына нисек тәбиғи башланып китә:

Йөрөмәм инде, иҙмәм ал ҡыуаҡты,
Эҙләһәм дә, тапмам эҙеңде.
Төштә генә күрҙем мин ул саҡты,
Һоло сәс көлтәһен үҙеңдең.

Тәржемә эшенә шағир үҙ ижадына ҡараған кеүек (бәлки, унан да ныраҡтыр) талапсан ҡараны. Ғүмәр Хәйәмдең робағиҙарын башҡортсаға

әйләндереүгә һалған көс – бының асығ миҫалы. Һөҙөмтәлә донъялағы иң билдәле тәржемәләр менән ярышырлығ поэтик гәүһәрҙәр тыуҙы.

Талантлы шағир, тәржемәсе, фольклорсы Рәми Ғариповтың публицистик мираҫы әлегә бөтөнләй тиерлек өйрәнелмәгән. Өҫтәүенә, ул үткер күҙле, һиҙгер күңелле уҡытыусы ла ине. Бер генә көнлөк педагогик стажы булмаһа ла, алтмышынсы-етмешенсе йылдарҙа әҙәбиәткә килгән күпме йәштәр Рәми Ғариповтың аҡыллы кәңәштәрен, хәстәрлекле иғтибарын күңелендә һаклай. Ул йәш быуын менән иң ныҡ бәйләнгән шағирҙарҙың береһе булды, әҙәбиәттә күренгән һәр яңы исемгә ихлас ҡыуанып йәшәр ине. Рәми Ғарипов алтмышынсы йылдар аҙағында «Башҡортостан ҡыҙы» журналын ойоштороусыларҙың береһе булды һәм унда эшләгән осорҙа үзенең тирәһенә йәш көстәрҙе айырыуса ныҡ тупланы. Райондарҙа йөрөгәнендә ул иң элек йәш ҡәләмдәрҙе табырға, уларға ярҙам ҡулы һуҙырға ашыкты. Ләкин бер кемде лә маҡтарға ҡабаланманы, Рәми Ғарипов менән ижади аралашыу һәр йәш шағир өсөн иң талапсан мәктәпкә әйләнде. Шағирҙың аяуһыҙ тәнҡитенән өркөп, унан ситләшкәндәр, уға ҡабат шиғыр уҡырға батырсылыҡ итмәгәндәр ҙә булманы түгел. Ләкин Рәми Ғариповтың йәштәр менән бәйләнеше бер ҡасан да һүрелмәне, ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем шағир улар араһында булды. Үҙенең язмышына ҡарағанда халҡының киләсәген нығырак хәстәрләне. Күпме шағирҙарға уның аҡыллы кәңәштәрен тыңларға, Рәми Ғарипов мәктәбен үтергә насип булды. Киләсәктә лә әҙәбиәткә килеүселәр ошо мәктәптең һәйбәт һабаҡтарын алып тәрбиәләнер. Һуңғы минуттарҙа ла уның уйҙары,

моғайын, йәштәргә төбәлгәндер. Шағир 1977 йылдың 20 февралендә ҡапыл вафат булды. Иртәгәһенә йәш ижади интеллигенцияның республика конференцияһы асылды. Шағирҙы һуңғы юлға уның замандаштары, ҡәләмдәштәре менән бергә күп һанлы уҡыусылары ла оҙатып барҙы. Ошондай оло юғалтыу уларҙың күңелендә онотолмаҫлыҡ яра ҡалдырҙы. Рәми Ғарипов менән мәңгелеккә хушлашҡанда уҡылған ошо шиғырым йоҡоһоҙ төндә күңелде ярып тыуғайны:

Бурап яуған февраль ҡарҙарында
Талпынды ла саңҡып бәрелде бит
Ғорур бөркөт ғорур ҡаяға.
Тоғроларҙан булды ул тоғороҡ,
Саяларҙан булды сараҡ.

Тыуҙы ошо февраль ҡуйынында,
Ауҙы ошо февраль көртөнә,
Йүрүҙәне ҡалтыранып сатнай,
Янғантауы янып көрһөнә.

Боҫоп йәшәр күпме төлкөнө ул
Күләгәһе менән өркөттө.
Ниңә бынау февраль буранында
Ҡанаттары янды бөркөттөң?

Ҡанаттары янды,
Йөрәккәйен
Баҫманымы ошо боҙ һауа?
Боҙ һауанан янған йөрәгенә
Тик тоҙ тама,
Тик тоҙ, тоҙ тама.

Түшәп китте ерҙең яраһына
Февраль еле йылы ҡарҙарҙы.
Февраль үҙе ниңә яҙға тартым,
Үҙе күрә алмай яҙҙарҙы?

Өргән булһа ла бит бөгөнгө көн
Биттәремә гүрҙең һалҡынын,
Ишетәм бөгөн гөрләүектәр шауын,
Тоям барыбер бөгөн яҙ тынын.

Бөрө кеүек ҡапыл асылдың һин,
Тамсы булып ҡапыл иренең.
Яҙ көнө ул һәр кем яҙҙы маҡтай,
Һин ҡыштарын күрзең бөрөнө.

Был донъянан һинең китеүҙәрең
Йөрәгемде йөзгә тураны.
Ҡәбереңә май сәскәһе һибеп,
Илай бөгөн февраль бураны.

Рәми Ғарипов беҙҙең аранан артыҡ иртә – ни бары ҡырҡ биш йәшендә китте, ләкин ул башҡорт шиғриәтенә юйылмаҫ биҙәк, онотолмаҫ моң өҫтәп китте.

Шағирҙың эш бүлмәһендә эленеп торған Башҡортостан картаһы тағы ла күҙ алдыма килә. Унда Рәми Ғарипов булмаған ҡала йәки район ғына түгел, хатта ауыл да юҡ тиерлек. Ә бит сағыштырып уйлап ҡараһаң, шағирҙың йөрәк һүҙе лә нисәмә меңдәрсә кешеләрҙең йөрәгендә йәшәй, халҡыбыҙҙың рухи хазинаһында ҡәҙерләп һаҡлана.

Шағирҙың яҙылып бөтмәгән бер поэмаһы «Яндырылған хаттар» тип атала. Уның үҙенең яҙмышы ла йырланып бөтмәгән йыр кеүек өҙөлдө.

Бер аяғың баҫһа бөгөнгөгә,
Иртәгәгә баҫһын береһе, –

Шағирҙың ошо һүҙҙәрен онотоу мөмкин түгел.

Шағир һәр ваҡыт үҙен уҙғандар менән киләсәкте бәйләүсе көс итеп тойҙо. Хатта был донъянан киткәс тә уның өсөн был бәйләнеш өҙөлмәне:

Тупрағыма тубырсыҡтар яуһа,
Мин донъяға тағы ҡайтырмын.
Мәңге йәшел бейек ҡарағайҙың
Тамырзарын тотоп ятырмын.

Рәми Ғарипов үҙе тере саҡта уҡ халҡым тип янып йәшәүзең, илеңә, телеңә тоғро хеҙмәт итеүҙең юғары бер өлгөһөнә әйләнһә, һуңғы йылдарҙа Шағир образы менән тулылана бара.

Рәми Ғарипов шиғриәте лә бөгөнгөнән киләсәккә ҡыйыу үтәсәк, һәр саҡ яҡтылыҡҡа, ғәҙеллеккә, матурлыҡҡа, кешеләр һәм халыҡтар дуҫлығына саҡырыусы шағирҙың аманатын уның ижады тыуыр йылдарға еткерәсәк.

Ҡатмарлы тормош юлдарында был талантлы шағирҙың ҡайһы бер миҙгелдәрҙә шатлығына ҡарағанда һағыштары, көндәренә ҡарағанда төндәре күберәк булғандыр. Хәҙер уның төндәре бөттө, кешеләр күңелендә шиғри нур булып йәшәр көндәре генә ҡалды. Башҡорт халҡының киләсәктә күпме көнө, күпме быуаты булһа, Рәми Ғарипов ижадыныңда шунса ғүмере буласаҡ.

***

Беҙ уларҙың тантаналарында үҙебеҙҙең хәл-әхүәлдәребеҙҙе барлайбыҙ, бөгөнгө тормошобоҙ тураһында, уның ҡыуаныслы һәм борсоулы яҡтары хаҡында нығыраҡ уйланабыҙ.

Халҡыбыҙҙың ғорурлығына әйләнгән бөйөк шәхестәребеҙҙең юбилейҙарында беҙ уҙған юлдарыбыҙҙы ентекләберәк байҡайбыҙ, маяҡтарыбыҙҙы тикшерәбеҙ, оло маҡсаттарыбыҙҙы яңынан асыҡлайбыҙ.

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғарипов милләтебеҙҙең бына шундай шәхестәренең береһе.

2012 йылдың 12 февралендә, үҙе иҫән булһа, уға һикһән йәш тулыр ине. Бына инде утыҙ биш йыл! – беҙ Рәми ағайһыҙ йәшәйбеҙ. Утыҙ биш тип әйтеүе генә аңһат, ә ошо йылдар халҡыбыҙ өсөн, барлыҡ Башҡортостаныбыҙ өсөн ни тиклем ҡатмарлы һынауҙар дәүерe булды. Тереләр генә түгел, арабыҙҙан киткәндәр ҙә ошо ҡаты һынауҙар юлын үтте.

Заманында: «Мин – донъяның тотҡаһы!» – тип, кеше һәм ил яҙмыштары менән уйнаған күпме тәкәббер хакимдәрҙең бушлығы фашланды. Заманында маҡтауҙарға күмелгән күпме әҙиптәрҙең дан-шөһрәте тарихи тетрәнеүҙәрҙә бик тиҙ һыпырылып төштө. Үҙҙәре менән бергә ижадтары ла әйтерһең дә ергә күмелде.

Рәми Ғариповтың ҡайһы бер әҫәрҙәрен үҙе иҫән саҡта тыйырға, тереләй ергә күмергә тырышыусылар ҙа аҙ булманы. Ләкин алтынды бик алыҫҡа йәшерһәң дә, ергә күмһәң дә, барыбер алтын булып ҡала.

Заманында гөрләп торған «Аҡ тирмә» клубында Рәми Ғарипов ижадына арналған «Аманат» кисәһендә 1989 йылдың 24 февралендә мин ошондай һорау биргәйнем: шағирҙың әҫәрҙәрен кемдәр күберәк белә, шағирҙың тере сағындағы замандаштарымы, әллә уны шиғырҙары буйынса ғына үҙҙәре өсөн аҫкан хәҙерге йәштәрме?

Кемдәрҙең күберәк белеүен, күберәк булыуын һанап тормайыҡ. Ләкин шуныһы бәхәсһеҙ һәм шуныһы бигерәк тә ҡыуаныслы: Рәми Ғариповтың ижад донъяһы тулыраҡ асыла бара һәм укыусыларҙы, бигерәк тә йәштәрҙе йылдан-йыл нығыраҡ ылыҡтыра.

Рәми Ғариповтың ижады үҙенә ҡарағанда күпкә бәхетлерәк булып сыҡты. Вафатынан һуң ҡалын-ҡалын китаптары, өс томлыҡ һайланма әҫәрҙәре донъя күрҙе. Тере сағында шағирға һан буйынса ла, күләм буйынса ла был тиклем баҫмаларҙы ҡулына алып ҡыуанырга насип булманы. Рәми Ғариповҡа Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән юғары дәрәжә, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы бирелде. Йорт-музейы төҙөлдө. Өфөләге ул укыған мәктәп республика гимназияһына әйләнеп, хәзер Рәми Ғарипов исемен йөрөтә. Йорт-музейы алдында ла, гимназия алдында ла шағирҙың бюстары күтәрелде. Рәми Ғарипов тураһында фильм төшөрөлдө, уның исемендәге премия булдырылды. Уға бихисап шиғырҙар арналды. Рәми Ғарипов ижады хаҡында Мостай Кәрим, Хәким Ғиләжев, Назар Нәжми, Ғайса Хөсәйенов, Ғилемдар Рамазанов, Мәрйәм Ғималова, Әхиәр Хәкимов, Әнғәм Атнабаев, Роберт Миңнуллин, Марсель Ғафуров һ.б. һоҡланып яҙҙы. Матбуғатта әленән-әле иҫтәлектәр, ижадына байҡауҙар баҫыла. Бик күп замандаштарының ихлас һүҙҙәренән, хәтирәләренән тупланған ҡалын иҫтәлектәр китабы баҫылып сыҡты.

Ләкин иң мөһиме шунда: Рәми Ғарипов шиғырҙары – халыҡ телендә. Шағирҙың китаптарын төҙөгәндә уның әҫәрҙәренә инде нисәнсе ҡат әйләнеп ҡайтыуым булғандыр. Барыһы ла нисәмә тапҡырҙар уҡылған, күпмеһен Рәми ағай вафат булғас ҡатыны Надежда Васильевна менән, Тимер Йосопов, Динис

Бүләков, Сафуан Әлибаевтар менән тиҫтәләрсә блокноттарынан сүпләп алып, матбуғатҡа сығарҙыҡ. Шуға күрә барыһы ла тиерлек ныҡ таныш. Әммә яңынан уҡыған һайын күңелдә яңы кисерештәр тыуа, шағирҙың яңы яҡтарын асаһың, мираҫы тулыраҡ донъя күргән һайын нығыраҡ аңлай бараһың.

Рәми Ғариповтың ижад ғәләменә тәү башлап ингән уҡыусы иһә үҙе өсөн өр-яңы донъяға килеп юлышасаҡ, ғүмере буйы уның яңынан-яңы сифаттарын күрәсәк. Төрлө яҡтарҙа уҡыусылар менән бергә аралашҡанда Рәми Ғарипов әҫәрҙәренең халыҡ күңелендә нығыраҡ тамырлана барыуын күреп ҡыуанам. Был тойғоларҙы киләсәктә әле күпме быуын уҡыусыларыбыҙ кисерәсәк. Халыҡ шағирының халыҡсанлығы, ваҡыт һынауҙарын үтеп, үҙен нығыраҡ раҫланы, милләтебеҙҙең бөгөнгө рухи йәшәйешенең айырылғыһыҙ, бик мөһим һәм даими бер сифатына әйләнде.

«Заманым тип тамаҡ ярмаһам да, заман ярып үтте йөрәкте» тигәйне Рәми Ғарипов. Образлы әйтелгән был һүҙҙәр шағирҙың яҙмышына тамғаланды: ҡырк биш йәшлек ир-егеттең йөрәге ярылып, тибеүҙән туҡтаны. Ләкин ысын таланттар һәр замандың, һәр быуындың замандашы, фекерҙәше, юлдашы булып ҡала. Улай ғына ла түгел, Рәми Ғарипов милләтебеҙҙең һәр дәүерҙәге хәл-әхүәлдәрен билдәләүсе намыҫ үлсәмдәренең, рухи критерийҙарыбыҙҙың береһенә әйләнде.

Һикһәненсе йылдарҙың икенсе яртыһынан алып бөгөнгө көнгә тиклем халҡыбыҙ һәм республикабыҙ бик ҡатмарлы үҫеш юлы үтте. Башҡортостандың суверенитет өсөн көрәш юлында, артабан яулаған хоҡуҡтарыбыҙҙы нығытыу, дәүләтселегебеҙҙе үҫтереү өсөн тынғыһыҙ эҙләнеүҙәр, тырыш хеҙмәт дәүерендә

башҡорт әҙиптәренең һүҙе, ижтимағи эшмәкәрлеге ҙур көскә әйләнде һәм ошо рухи яңырыуға, милли-ижтимағи, сәйәси күтәрелешкә яңы ғәйрәт өҫтәүҙә яҡты донъяларҙан күптән киткән ил ҡашҡалары ла, яңыраҡ вафат булған арҙаҡлы шәхестәребеҙ ҙә тереләр менән бер сафта барҙы. Үҙенең хаҡлы талаптарын ҡуйғанда халҡыбыҙ Аҡмуллаларҙың, Вәлидиҙәрҙең, Бабичтарҙың, Муса Мортазиндарҙың, Рәми Ғариповтарҙың фекер-аманаттарына таянды, шундай шәхестәре менән кәңәшләште. Уларҙың яҡты образдарын күҙ алдыбыҙға килтереп, әле лә үҙебеҙҙең булмышыбыҙҙы, тоғролоғобоҙҙо, рухи сәләмәтлегебеҙҙе һәм сафлығыбыҙҙы тикшерәбеҙ.

Рәми Ғариповтың ижады нисек шулай яңы замандарҙа ла тере көйө ҡалды, үҙенең ниндәй аҫыл яҡтары менән кешеләргә, бөтә халҡыбыҙға шулай кәрәкле була алды һуң?

Вакыт ағышы бер нәмәне лә йәлләмәй, таш диуарҙарҙы ла ҡаҡшата. Ялғанды бигерәк тә аяуһыҙ емерә. Ә бына хәҡиҡәт, дөрөҫ эш, дөрөҫ һүҙ таш ҡаяны ҡомға әйләндерерлек ваҡыттың һынауҙары алдында ла тиҙ генә бирешеп бармай.

Рәми Ғарипов ижады барыһынан да элек үҙенең тура һүҙе, тормошта хәҡиҡәтте яҡлауы, һәр саҡ дөрөҫлөккә тоғролоғо менән көслө. Бына шағирҙың кредоһын, йәшәү асылын ғәжәп тулы күрһәткән бер шиғыры:

Бәлки керләнеп тә бөтөрмөн мин,
Янған өсөн яла яғылыр.
Ялған һыйыныр ер булмаһа ла,
Яласылар әле табылыр.

Тик намыçты данға алмаштырмам,
Юк, алданмам арҙан даныма.
Мин янырмын ғәҙеллекте яҡлап,
Ҡәләмемде манып ҡаныма.

һәр нәмәне халҡым зиһене менән,
Халҡым күҙе менән күрермен.
Кәрәк булһа, илем, телем өсөн
Ғәзиз ғүмеремде бирермен.

Юк, теҙләнмәм ялған алдында мин!
Маҡсатымдың иң-иң алыçын
Яҡын күрер күҙем, һәм күҙемдә
Балҡып яныр ғорур намыçым!

Утыҙ йәшендә – 1962 йылда яҙған ошо уй-тойғоларын шағир туғыҙ йылдан һуң былай дауам итә:

Яла яғыр тотош бер йыйылыш,
Тотош бер йыйылыш ялғанлар...
Ләкин хаҡлыҡ һинең яҡта икән,
Ялмай алмаç һине ялалар.
Дөрөçлөктө ҡурҡып яҡламайҙар,
Мең ялғанға торор бер үзе!..

Был шиғырҙарҙы уҡығанда шағирҙың үткер ҡарашы, көслө ихтыярлы йөҙө, үҙенә яла яғырға тырышыусылар менән ҡыйыу алышҡаны күҙ алдына баҫа, ике йөҙлөләрҙең битенә бәреп, сатнатып әйткән һүҙҙәре ҡолаҡта сыңлап китә.

Тыуған яҡтарында комсомол етәксеһе булып эшләгәндә лә, Яҙыусылар союзында ла, журнал редакцияһында, нәшриәттә, обком кабинеттарында ла Рәмиҙең ғәҙелһеҙлек менән йөҙгә-йөҙ килеп

бәрелешкән, хаҡлыҡ өсөн сая алышҡан саҡтары аҙ булдымы ни? Был шиғырҙар Рәми ағайҙың дәфтәрендә һаҡланып ҡалған. Әллә үҙе матбуғатҡа бирергә ашыҡмаған, әллә тыйыу-сикләүҙәрҙе үтеп баҫтыра алмаған. Әллә ҡаты һөйләшеүҙәрҙән һуң йөрәге һыҙлауынан үҙе өсөн генә яҙып ҡуйған...

1957 йылдың 11 майында ҡатынына яҙған хатында Рәми Ғарипов бына нимә ти: «Баҡһаң, минең бик күп – иллеләп яңы шиғырҙарым бар икән! Ә бына һуңғыһы, иң һәйбәте һәм иң кәрәклеһе – "Туған тел". Минең бөтә шиғырҙарымды оноторға мөмкин, әммә башҡорт телен ҡаҙерле күргән кешегә был шиғырҙы оноторға ярамай!»

«Туған тел» шиғырының яҙылыу ваҡытына иғтибар итәйек: 2 май 1957 йыл. Ул саҡтарҙа донъяны шаулата торған байрам әле тынмаған, ә йәш Шағир ошо шау-шыу мәлендә иле, теле хаҡында уйлана, үҙенең иң атаҡлы шиғырын ижад итә. Мин быларҙы бөгөнгө йәштәребеҙ күберәк белһен ине тип әйтәм.

Халҡыбыҙҙың был шиғырҙы онотҡаны юҡ. Инде нисәмә быуын сабыйҙарыбыҙҙың шиғриәткә мөхәббәте Рәми Ғариповтың «Туған тел» шиғырын ятҡа һөйләүҙән башлана. Ниндәй генә мәктәпкә инһәң дә, был шиғырҙың шағир һүрәте менән бергә иң хөрмәтле урынға яҙып ҡуйылғанын күреп ҡыуанаһың. Бөгөн шулай шатлана алабыҙ, ә «Туған тел» яҙылған заманҙарҙы хәтерләһәң...

Әле генә илһамланып, ижадҡа сумып йәшәүе хаҡында һөйләгән Рәми 1957 йылдың июнендә ҡатынына яҙған хатында бына ниндәй ауыр уйҙар кисерә: «Минең тормош – ниндәйҙер "ен дүңгәләге" һәм ул минең халҡымдың ҙур тормошона, минең уға инаныуҙарыма, уны яратыуҙарыма барып тоташҡан. Мин уға үҙемдән нимәлер ҡалдырырға теләйем, уға

нимә менәндер файҙалы, кәрәкле булырға теләйем. Ә бына шуның өсөн мине эҙәрлекләйзәр, һорау алалар, һәм унда ултырған бәндә йораттарына ҡарата миндә бик ҙур ышанмау тойғоһо тыуҙы. Беҙҙең менән ниндәй боҙоҡ кешеләр бойороҡ итергә теләгәнен хәҙер мин үҙем күрҙем».

Был һүҙҙәрҙе яҙғанда Рәми егерме биштә булған. Шағирға тағы ла тулыр-тулмаҫ егерме йәш йәшәргә ҡалған. Ошо егерме йыл эсендә юлында әллә күпме кәртәләр осраһа ла, Рәми Ғарипов һайлаған маҡсаттарынан ситкә боролманы, ижады тағы ла тулылана, нығына барҙы. Шифриәте һәр саҡ хәҡиҡәткә тоғро ҡалды.

Ләкин тормошта хаҡлыҡты яҡлағанда уны кешеләрҙең күңеленә уйып ҡалырлыҡ тапҡыр һүҙҙәр ҙә табырға кәрәк бит әле. Шағир өсөн иһә бынығы – иң мөһиме һәм иң ҡыйыны. Рәми Ғарипов шул ҡыйынлыҡты – һүҙҙең ҡаршылашыу көсөн еңгән Шағир, башҡорт шифриәтенең яңы камиллыҡҡа күтәрелеүенә ҙур өлөш индергән һүҙ оҫтаһы. Башҡорт шифриәтенең үҫеш юлында һәр дәүерҙә уның төп уңыштарын яулаусы, йөҙөн, асылын билдәләүсе, тормош хәҡиҡәтен шифри моң, образлы шедеврҙар итеп мәңгеләштереүсе, замандаштары өсөн генә түгел, бөгөнгө һәм киләсәк өсөн хазина тыуҙырыусы оло таланттар, үҙәк фигуралар донъяға килә торҙо. Ун туғыҙынсы быуаттың аҙағын йомғаҡлағанда халҡыбыҙҙың һүҙ хазинаһына Аҡмулланың ҡойоп ҡуйған, береһенән-береһе тапҡыр шифри юлдары өҫтәлгәйне. Егерменсе быуат башында был гәүһәрҙәргә Мәжит Ғафуриҙың әҫәрҙәре ҡушылды. Унынсы йылдарҙың икенсе яртыһында шифриәт майҙанында Шәйехзада Бабич төп көскә әйләнде, революция һәм граждандар

һуғышы фажиғәләре уртаһында башҡорт халҡының намыҫ һүҙен әйтеп ҡалдырҙы. Бөйөк Ватан һуғышы барғанда Рәшит Ниғмәти поэмалары шиғриәтебеҙҙең, иң юғары ҡаҙанышы булды, һуғыштан һуңғы йылдарҙан алып, бөгөнгө көнгә тиклемге араларҙа Мостай Кәрим таланты әҙәбиәтебеҙҙе бөтә донъя алдында танытты, дөйөм кешелек ҡиммәттәре киңлектәренә алып сыҡты. Алтмышынсы-етмешенсе йылдарҙа Рәми Ғариповтың ижади эшмәкәрлеге башҡорт һүҙ сәнғәтен яңы бейеклеккә күтәрҙе.

Әлбиттә, әҙәбиәттең үҫеш тарихына күп әҙиптәр үҙ өлөшөн индерә. Мостай Кәримдәр, Рәми Ғариповтар ижад иткән дәүерҙә Назар Нәжмиҙәрҙең, Рәшит Назаровтарҙың шиғриәтебеҙ күгендә ниндәй йондоҙҙар булып дөрләп янғандарын онотмайыҡ. Ләкин әле мин шиғри һүҙҙе өр-яңыса балҡытҡан, милләттең эстетик һәм рухи үҫешендә яңы тарихи этап күренештәре хаҡында һүҙ алып барам.

Тыуған яҡтарында комсомол секретаре булып эшләгән сағында, 1961 йылдың 13 майында Рәми Ғарипов үҙенең көндәлектәренә байтак биттәр өҫтәгән. Был биттәр шул көндә яҙылған «Төштәр» исемле шиғыр менән башланып китә һәм йәшәү рәүеше хаҡында фәлсәфәүи уйланыуҙар һәм күҙәтеүҙәр бер-береһенә ялғана. Шуларҙан бер өҙөк килтерәм: «Шиғырҙар был арала байтаҡ яҙылды. Тик эшкәртеп ултырырға ваҡыт юҡ. Ат менән юлға сыҡһаң, тирә-яның тулы шиғыр!.. Атты туҡтатып, һыҙғалап аламда тағы ары китәм, тағы яҙам. Йә эйәр өҫтөндә ултырған килеш, йә аттан төшөп яҙырға керешәм. Иң күңелле, иң бәхетле минуттар был!..»

Ошо бер нисә юлда Рәмиҙең бар булмышы асылған. Шиғриәт, әҙәбиәт, ижад уның өсөн йәшәйешенең төп мәғәнәһе, барлык яҙмышы ине. Ул

бер ваҡытта ла илке-һалҡы эшләмәне, туған теле, халҡының һүҙ сәнғәте өсөн мөкиббән китеп йәшәне. Ул әйтер һүҙенә иң юғары талаптар ҡуйып, шиғырҙарына барлыҡ йөрәк ялҡынын, зиһененең нурын биреп эшләүсе, ысын мәғәнәһендә профессиональ әҙип булды. Рәми Ғарипов әҫәрҙәрендә үҙебеҙҙең һүҙ байлығы донъя шиғриәтенең традицияларыменән үрелеп, образлы фекерләүнең үҙенсәлекле синтезын тыуҙырҙы. Тәбиғәт биргән һәләтен ул фиҙакәр эшкә егә белде, тынғыһыҙ эҙләнеүҙәр, туҡтауһыҙ хеҙмәт арҡаһында халыҡтың хәтеренә уйылыр әҫәрҙәр ижад итә алды.

Айсбергтың туғыҙҙан бер өлөшө генә күренә, ҡалғаны һыу аҫтында, тиҙәр. Рәми Ғарипов тере сағында замандаштары уның рухи донъяһының бер өлөшөн генә күреп ҡалды. Был донъя йылдан-йыл тулыраҡ асыла бара. Көндәлектәрендә күпме талпыныу һәм һыҙланыуҙар, күпме тапҡыр фекерҙәр, әҙәбиәт тураһында тотош ғилми тикшеренеүҙәр... Улар ҡалын том булып баҫылып сыҡһа ла, матбуғатта күренмәгәндәре күпме!.. Хаттары бергә тупланып бөтмәгән, архивын ғалимдар әлегәсә махсус өйрәнмәгән.

«Ҡараламам» шиғырында (1971) Рәми Ғарипов «Ҡараламам – ҡара тирем генә, аҡ тоҙон мин аҡҡа күсерҙем» тигәйне. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, яҙғандарының күпмеһен аҡҡа күсереп өлгөрмәне, уҡыусыларға еткереп өлгөрмәне. Ләкин шағир ҡаралама тип һанаған ҡулъяҙмалар араһында ни тиклем шиғри аҫылташтар балҡый!

Тышта февраль бураны үкһегәндә утыҙ йәшлек Рәми: «Бына инде, шулай ҡайнай торғас, үтте ғүмеремдең яртыһы», – тип көрһөнөп ҡуйғайны. Исмаһам, һис юғында шулай булған булһа икән дә

бит!.. Ул сағында шағир әле күпме әҫәрҙәр ижад итер ине, уға яңы Башҡортостанда йәшәп ҡыуанырға насип булыр ине.

Башҡорт шағирының һуңғы һулышына тиклем янында фарсы-тажик шағиры, ғалимы, аҡыл эйәһе Ғүмәр Хәйәм рухы булған, вафатына бер көн ҡалғанда, йәғни 1977 йылдың 18 февралендә Рәми ошо робағиҙы тәржемә иткән:

Ахырыҙаман етеп, көнө байығанда,
Күк ҡыйралып, Ҡош юлы ла юк булғанда,
Һаҡалынан һелкеп тотоп Тәңренең мин:
«Шулмы эшең, — тип һорармын, — был
Йыһанда?»

Шағир күпме робағиҙар араһынан үҙенең тынғыһыҙ рухына яҡынын һайлап алған: ҡиәмәт көнө килгәндә лә яҙмыш менән туҡтауһыҙ яғалашыу. Был Рәми ҡулы яҙған һуңғы юлдар тигән минең элекке раҫлауыма хәҙер төҙәтмә иңдерергә кәрәк. Мин ул ваҡытта шағирҙың көндәлектәре менән таныш түгел инем. Уларҙы уҡыу үҙенең төҙәтмәләрен өҫтәй.

Тыуған көнөн – 45 йәшен Рәми балалары менән үткәрә.

«12.02.77.

Төн. Азамат та, Гөлнара ла йоҡларға ятты.

Тойғоларын артыҡ күрһәтмәйенсә, яттылар. Үҙҙәренсә кисерҙеләр, әлбиттә. Мин 7 һум 50 тинлек быяла тапшырып, уларға бәләкәй генә байрам яһарға тырыштым, һөт, ҡатыҡ, кефир, сливки, шәкәр менән лимон, тауыҡ эсендә бешкән бәрәңге (тоҙло, боросло, һуған, лавр япраҡлы, әлбиттә) ҡушып, духовҡала ҡыҙҙырып, үҙемсә бер аш яһарга тырыштым. Тәмле булды, буғай. Аҙак мәтрүшкәле, төрлө үлән

ҡушылған, ҡуйы һөтлө сәй эстек. Үҙем сәй менән бергә бер “Экстра”ның ярты һынан күберәген эстем, мөңрәнеп, бөтә үткән ғүмерҙе йөрәгемдән үткәрҙем».

Ҡырҡ биш йәшен Рәми Ғарипов балалары менән ошолай байрам итте. Улдарының, ҡыҙының холоҡ-ҡылығтары, киләсәк яҙмыштары тураһында уйланды.

Һүҙен былай йомғаҡланы: «Ә минең иң теләгәнем – ахырғаса балаларҙа ихтыяр көсө һаҡлау. Ниндәй генә нескә күңелле булма, иң мөһиме – ихтыяр көсө! Мине йәшәткән нәмә – бөтәһен дә бер уҫка йомарлағаны – шул көстә! Бәләкәс ғазаптарға тыбырсынһам да, ололарына түҙерлек оло көс бар, буғай, миндә. Мине һындырыу әлегә мөмкин түгел...»

Шағир әле тауҙар аҡтарыр һымаҡ.

19 февралдә ошо шиғыр тыуа:

Февраль бураны

Ышанмағыҙ февраль буранына,
Бер яуыз уй юҡтыр уйында...
Күпме генә шашып дулама һын,
Яҙ һылыуы уның ҡуйынында.

Был донъяла булыр
Барыһы ла,
Һинең менән бары
Мин булмам.
Бына ниндәй үкенестәр
Бар бит –
Ҡалай үлмәк кәрәк,
Күҙ алмам...
Түҙалмам мин ләкин,
Түҙалмам.

Шағир яҙған һуңғы юлдар бына шулар булған. Был һүҙҙәрҙә – әүлиәләр һиҙгерлеге. 20 февралдә Рәми Ғариповтың йөрәге тибеүҙән туҡтаны. Рәми Ғариповтың моңло йырға әйләнгән «Кәкүк» исемле шиғырындағы был һүҙҙәрҙе бөгөн кемдәр генә ҡабатламай:

Кәкүк, кәкүк!
Үпкәләмәм
Аҙ бирһәң дә ғүмерҙе:
Бар ҡайғыһын, бар шатлығын
Татып китәм был ерҙең!..

Аҙ йәшәһә лә, Рәми күпте күреп, күпте кисереп китте. Шағирҙың тормош ағышындағы хәүефле хәлдәрҙе алдан зирәк һиҙемләүе, милләтебеҙҙең Башҡортостандың яҙмышы хаҡындағы борсолоуһыҙланыуҙары дөрөҫкә сыҡты. Шуға ғүмерендә оло йәшкә етмәһә лә, Рәми Ғарипов оло булып, олпат булып ҡала. Әйткән һүҙҙәре бөгөн дә ҡәҙерле, бөгөн дә халҡыбыҙҙың теләк-ынтылыштары менән ғәжәп тап килеп, уны фиҙакәр эштәргә рухландырып, берҙәмлеккә һәм уяулыҡҡа, ҡыйыулыҡҡа һәм уңғанлыҡҡа саҡырып тора.

Заманында Ҡазандың Бауман урамында йөрөгәндә бер хәл килеп сыҡҡас, Мостай Кәрим: «Был ваҡытта Ғабдулла Туҡай нишләр ине икән?» – тип һорап ҡуйғайны. Туҡай йәшәгәнде өс тапҡыр йәшәгән аҡыл эйәһе Мостай ағай бына шулай тигәйне.

Йәшәлгән йәшем буйынса хәҙер мин байтаҡ йылдар бергә аралашҡан фекерҙәшем, юлдашым, остазым Рәми Ғариповтан күпкә оломон. Ләкин тормош ҡуйған ҡатмарлы һорауҙарға яуап таба

алмай ҡаңғырған саҡтарымда мин үҙем дә һиҙмәҫтән «Бындай ваҡытта Рәми ағай нисегерәк эшләр ине икән?» – тип һорағаным, уның менән кәңәшләшкәнем бар.

Ошолай өндәшер, кәңәшләшер кешеләреңдең булыуы ниндәй бәхет.

Ирлек булһын шағирлыҡта,
Шағирлыҡта ирлек булмаһа,
Ни мәғәнә дөрөҫ һүҙ әйтеүҙән,
Дөрөҫ һүҙең инде һуңлаһа? –

Рәми Ғарипов үҙенә лә, башҡаларға ла бына шундай ҡаты талап ҡуйып ижад итте. Уның әйткән һүҙе һуңламаны. Үҙенә күргә насип булмаһа ла, шиғырҙары – яңы Башҡортостан өсөн көрәштең үҙәгендә, яңы быуындарҙы рухи үҫтереүҙә ышаныслы таяныс.

Рауил БИКБАЕВ,
Башҡортостандың халыҡ шағиры

И песня к людям возвратится снова...

Есть в нашей литературе такое загадочное, до конца ещё не осмысленное культурой явление, имя которому – «шестидесятники»...

Они родились в стране на ветрах свободы, которым подставили паруса своего творчества. Их вдохновляли успешное восстановление страны после страшной войны, достижения в науке и технике, особенно в космосе. Заметный рост благосостояния народа породил веру в будущее, надежду на новые успехи. Возникли, особенно в среде молодежи, бурная

романтика и безудержный энтузиазм. Все это вызывало тягу к поэтическому оформлению чувств. В обществе возникает дискуссия физиков и лириков. В Москве толпы народа собираются у памятника Маяковскому, где поэты читают свои стихи. Не пробиться в Политехнический...

